Ауырғазы районы муниципаль районының
муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Талбазы ауылы Лицейы

Мәләүез ҡалаһында үткән башҡорт теле уҡытыусыларының төбәк – ара конференцияһы тураһында
район башҡорт теле уҡытыусыларының семинарында сығыш

Әҙерләне:Талбазы Лицейының башҡорт теле уҡытыусыһы Ғүмәрова А.Ә.

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле уҡытыусылар!

Белебеүеҙсә, 2010 йылдан башлап мәктәптәргә федераль дәүләт белем биреү стандарттары индерелде. 2- се быуын федераль стандарттарҙың төп положениеларының береһе-универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу. Был термин уҡый белеүҙе, йәғни баланың яңы социаль тәжрибәне аңлы һәм актив рәүештә үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙ үҫешкә һәм үҙ камиллашыуға һәләтлеген аңлата. Яңы стандарттарҙың төп маҡсаты-баланы шәхес итеп тәрбиәләү.

19-20 майҙа БР Мәғәриф министырлығы тарафынан Мәләүез ҡалаһында “Дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттарын индереү шарттарында башҡорт телендә уҡытыуҙы ойоштороу һәм башҡорт телен өйрәнеү” темаһына төбәк-ара ғилми - ғәмәли конференция булып үтте. Был конференцияла миңә һәм башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Флүрә Ғибәтулла ҡыҙына ҡатнашыу бәхете тейҙе. Беренсе көндә уҡытыусыларға асыҡ дәрестәр күрһәтелде. Һуңынан “Башҡорт ҡымыҙы” тигән кластан тыш сара булды. Был кластан тыш сарала башҡорттарҙың йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүе, ҡымыҙ бешеү йолаһы күрһәтелде. Уҡыусылар матур, шыма итеп үҙ телдәрендә йырлауҙары, һөйләүҙәре һәм ихлас артистарса уйнауҙары менән бөтә уҡытыусыларҙы хайран ҡалдырҙы. Был саралар, әлбиттә, Кинйә Арыҫланов исемендәге 9- сы башҡорт гимназияһында үтте.

Ошо сараларҙан һуң уҡытыусыларға түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашырға тәҡдим ителде. Түңәрәк өҫтәл өс йүнәлештә ойошторолдо: 1- се төркөм -“Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙың көнүҙәк мәсьәләләре” темаһы буйынса эшләне. Уны Күзбәкова Рәйсә Абдрахман ҡыҙы алып барҙы. Был түңәрәк өҫтәлдә Флүрә Ғибәтулловна ҡатнашты. 2-се төркөм- “Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башәорт телен уҡытыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу” проблемаһы буйынса йыйылһа, 3-сө төркөм “Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?” темаһы буйынса эшләне. Мин икенсе төркөмдә ҡатнаштым һәм уның етаксеһе З.М.Ғәбитова ине. Шулай ук был түңәрәк өҫтәлдә Рәхматуллина Заһиҙа Әйүп ҡыҙы ( БИРО- йәш белгес), СДПА доценты Султаҡаева Л.Т. ҡатнашты. Түңәрәк өҫтәл артында һүҙ иң элек Ғәбитова З.М. ҡыҙына бирелде. Ул үҙенең сығышында башҡорт телен өйрәнеүҙең проблемалары һәм бурыстары тураһында, башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларға туған телебеҙҙе өйрәнеүгә ыңғай мотивация тыуҙырыу, халыҡ йолаларын, изге мираҫты үҙләштереүгә ихтыяж тәрбиәләүгә, үҙ аллы белем алыуға ынтылыш һәм изгелек уятырға кәрәклеге тураһында һөйләне. Туған телде өйранеү ата-әсәләр һәм уҡыусылар ҡарамағына һәм теләгенә ҡалдырылған шарттарҙа уҡыу- уҡытыу

сифатын юғары кимәлгә еткереү аша, уҡыу- уҡытыуҙа яңы технологиялар ҡулланып ҡына телебеҙҙең, халҡыбыҙҙың киләсәген ыңғай хәл итеп була. Түңәрәк өҫтәл артында артабан Зәкиә Муллағәли ҡыҙы һүҙҙе 2010 йылда "Башҡорт теле йыл уҡытыусыҡы" конкурсы енеүсеһе һәм Рәсәй кимәлендә 3- сө урын алған Рощинск ҡасабаһы башҡорт теле уҡытыусыҡына бирҙе. Ул конкурста нисек итеп еңеүгә өлгәшеүе тураһында һөйләне һәм ҡатнашырға өгөтләне. Ижади эшләгән уҡытыусы ғына һәләтле балалар , телде, йолаларҙы ихтирам иткән уҡыусылар тәрбиәләй алыуын билдәләп үтте. Артабан түңәрәк өҫтәл һорау-яуап формаһында барҙы. Уҡытыусылар үҙҙәрен борсоған һорауҙар бирҙе һәм проблемалары менән уртаҡлашты. Зәкиә Муллағәли ҡыҙы яңы стандарттарҙы индереү шарттарында ла туған телдәр уҡытыласағын һәм яңы бурыстар ҡуйыласағын өҫтәп үтте.

Конференцияла ҡатнашыусыларға шулай уҡ төрлө экскурсиялар ойошторолдо: Д.Бүләков исемендеге музейға, Балалар ижады һарайына, Д.Бүләков исемендәге мәктәпкә, К.Арыҫланов йөрөгән ерҙәргә барҙыҡ. Ҡайҙа ғына барма бик яҡшы итеп, матур, башҡорттарға хас ҡунаҡсыллыҡ менән ҡаршы алдылар.

20 майҙа конференцияның пленар өлөшө булды. Пленар өлөштә Күзбәкова Р.А., Ғәбитова З.М., Сурин А.Р., Ҡунафин Х.Ә. һәм башҡалар ҡатнашты. Һәр бер сығыш яһаусы башҡорт теле һәм уны өйрәнеүҙәге проблемалары тураһында һөйләнеләр. Шулай уҡ күрше Силәбе өлкәһенән ҡатнашыусылар булды.

Һүҙемде йомғаҡлап шуны әйтергә ине: семинар, конференцияларҙа ҡатнашып, күрше районларҙың нисек эшләүен күреп, тәжрибәләр менән уртаҡлашып ҡайтыу, беҙҙең эшкә әҙ булһа ла ярҙам итә. Шуға ла йөрөп , күреп ҡайтырға кәрәк.